МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

# "Балалар баҡсаһында леди һәм джентльмендар мәктәбе"

# проекты буйынса отчет

**Әҙерләне:**
**музыка етәксеһе**
**Ҡунаҡбаева Г.Р.**

**“Балалар баҡсаһында леди һәм джентльмендар мәктәбе” проекты буйынса отчет**

Ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау,нығытыу һәм тағы ла яңы ғаилә байрамдарын формалаштырыу маҡсаты менән “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһында йылдың икенсе кварталында планға ярашлы бик күп эштәр алып барылды.

Күңел асыу саралары(иртәлектәр) балалар баҡсаһы педагогтары һәм ата-әсәләр менән берлектә үткәрелде.8-се март халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған “Был донъяның матурлығы – әсәйҙәрҙә!” тип исемләнгән сара үтһә,ә инде яҙ байрамдары экология йылына арналды,фольклор – йола байрамдары: “Ҡар һыуына барабыҙ”, “Ҡарға буткаһы”, “Ағас көнө” байрамы уҙғарылды.Байрамға ҡалабыҙҙың “Ағинәйҙәр”йыйынынан Фәниә Фәкей ҡыҙы Сарбулатова һәм Венера Әнүәр ҡыҙы Йәнбәкова саҡырылды.Шулай уҡ атайҙар менән берлектә “Сыйырсығым-ҡошсоғом” акцияһы уҙғарылды.Еңеү көнөнә арналған иртәлеккә тыл һәм хеҙмәт ветерандары саҡырылды.Май айында ата-әсәләр менән берлектә күңелле лә,бер аҙ моңһоу ҙа “Һау бул,баҡсам!” иртәлектәре үтте.Балалар түҙемһеҙлек менән көтөп алған 1 июнь – Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө килеп етеү менән баҡсабыҙҙа шаулап-гөрләп Һабантуй байрамы үтте.Байрам маҡсаты булып халыҡ уйындарын,йолаларын нығытыу һәм формалаштырыу торһа,былар барыһы ла балалар күңелдәренә хуш килде.Бер бала ла бүләкһеҙ ҡалманы.

Балалар баҡсаһында тағы ла июнь айының планына индерелгән “Шляпа” көнө һәм “Башҡорт балы” байрамына әҙерлек эштәре алып барыла.